# [illegible]

## [illegible]

*Тимер ЙОСОПОВ*

## Салауат тауышы

I

Әйтерһең дә, Ер үҙәге —
Әбей батша кендеге.
Хатта йөҙөнә сыҡҡанмы
Ҡуҡырлығы, кемлеге.
Өҫтә ҡояш ҡара яна, —
Крәҫтиән эпәйе.
Дин китабы...
Ҡулын һала,
Ҡулы — тауыҡ тәпәйе.
— Һаҡлағыҙ ил бөтөнлөгөн,
Илебеҙ бәрәкәтен.
Эттәй күҙәтә ярандар
Хакимә хәрәкәтен,
Ҡулының хәрәкәтен.
Кәкерәйгән бармаҡтары,
Гүйә, дарҙағы ырғаҡ.
Һөргөн китер башҡорттарҙың
Үтер юлдары һырғаҡ,
Үтер юлдары йыраҡ...

II

Ҡанлы яу еңелде,
Шанлы яу...
Һатлыҡтар имандан ҡастылар.
Хатта күҙ йоммайса хакимдәр
Хаҡлыҡты ырғаҡҡа аҫтылар.
Иленде ҡыҙыра,
Оянды туҙҙыра
Аямай был ҡанлы итектәр.
Яза командаһы ҡотора,
Ирҙәр менән тулған ситлектәр.
Асырғанып һауа һулайҙар,
Тиренде терелэй тунайҙар.
Арбала сайҡала, арбала —
Салауат, Юлайҙар...
Арҡала — йәп-йәш ҡан,
Йәп-йәш ҡан,
Ҡайнаған, урғылған,
Ойошҡан.
Улҡайы күҙ алмай Юлайҙан.
Уйҙары тауҙарға төртөлә,
Тауҙарға һуғыла юлайҡан.
Һыртында шаша ҡан,
Таша ҡан,
Илай ҡан,
Тулай ҡан.
Түҙем бул,
Әй, егет, түҙем бул,
Күрәһе ғазаптар бар алда, —
Яралда...
...Язалау урыны...
Язалар...
Әй сыжлай ҡамсылар,
Сәсрәйме ҡып-ҡыҙыл
Тамсылар.
Көләме шырҡылдап ҡоҙғондар, —
Йыйын ҡырғындар...
Команда шатлана, шашына,
Әй кемдең башына?..
Палачтар ҡотора, палачтар
Ҡысҡыра — оҡшаған ендәргә.
Ҡамсылар һыҙғыра, ҡамсылар,
Ҡамсылар төшә шул индәргә.

III

Палачтары ҡурҡа,
Палачтары
Ҡәлғәләрҙән күсеп ҡәлғәгә,
Ил эсенә инһәң,
Башың харап,
Юлыҡмаһың тимә бәләгә.
Башҡортостан сиге буйлап үтә,
Сик тигәне утлы түңгәләк
Төпкә инһәң,
Күпте һорап тормай,
Сығарырҙар һине түпәләп.
... Язалау урыны...
Язалау...
Ут кеүек,
Ҡамсылар һыҙғыра,
Арҡаға һыҙыра,
Арҡаға һыҙыра,
Йөрәктең итенә.
Әллә һуң ҡан сәсрәй
Ҡояштың битенә...
Йәйелә киң ҡолас,
Һүнәме ал ҡояш...



IV

Ҡолағы төбөндә
Шаулаймы урмандар,
Тарала томандар...
Шартлаймы сыбыртҡы,
Йәлләдтән ел иҫкән...
Салауат шыбырлай:
— Мин иҫән, мин иҫән...
... Көндәре ауышҡан кисемә,
Әллә һуң ҡан һауған эсенә...
Донъяла яңғыҙы,
Кемгә һүҙ ҡатаһы?
Күҙ алды асыла,
Ҡайҙа һуң атаһы?..
Ут һымаҡ яна бит,
Арҡаһы сейләнгән.
Кем әле йәнәштә
Һөйләнгән?..
Атаһы, атаһы, атаһы —
Ул янған бер ағас ярҡаһы.
Сей яра — арҡаһы...
Илеңдә имендер
Өмөттөң ҡыяғы.
Йөрәккә баҫамы
Хәүефтең тояғы.
Атаһы, атаһы...
Улмы ни бисара,
Юҡмы ни һис сара
Арҡала сей яра...
Йәнеңде үртәйме,
Яралар төтәйме?..
Бар икән яҙаның
Донъяла мең төрө,
Шыбырҙай атаһы:
— Мин тере, мин тере...

V

Әй башҡорт ерҙәре,
Ерҙәре — быҙаулы,
Ерҙәре — ҡолонло,
Ирҙәре — бығаулы...
Һылыуҙар һүҙ әйтһә,
Телдәре көрмәлә.
Йәрҙәре ҡайҙа һуң,
Йәрҙәре төрмәлә.
Иленә һуғылды
Был мәхшәр ҡойоно,
Яҙмыштың ҡыйыны,
Буш икән ҡуйыны...
Хәшәрәт был карат
Ҡайҙарға юл алған?
Әй кәбәк баш үҙе,
Намыҫы юғалған.
Баш һалған дуҫтары
Ҡоҙғонға ем икән.
Ирҙәрҙе бур тиҙәр,
Үҙҙәре кем икән?..
Батырға — үлем дә,
Бахырға — кинәнес.
Ни генә ҡылмай һуң
Был карат — имәнес...
Гел талай,
Ул ҡалай
Башҡортто һемәйтә:
— Юлбаҫар, — ти беҙгә.
Ул һүҙҙе кем әйтә —
Яуыздың яуызы
Ҡыйшаймай ауыҙы...
Күп киҫте,
Күп аҫты,
Ҡулынан ҡан тама.
Екерә,
Кикерә,
Итәме тантана...
Ул карат, ҡәһәрең,
Һис юғы ирмәккә,
Эләкһә элмәккә...
Елдәре ятҡан да
Боҙ ялай,
Ҡар ялай...
Башҡорттоң аһтары,
Күҙ йәше дарьялай.

VI

Бар икән яҙаның
Донъяла мең төрө.
Шыбырҙай атаһы:
— Мин тере,
Мин тере!..
Атаһы ҡуҙғалмай,
Түшәге ҡаҡ иҙән.
Ә улы яуаплай:
— Мин иҫән, мин иҫән!..
Йәшенгә әйләнде тауышы,
Күктәрҙәй күкрәне.
Ғәйрәтте йыйған болоттай,
Ҡалҡынды күкрәге:
— Мин иҫән, мин иҫән!..
Алдында киңлектәр асылды
Шикләнмәй бер ниҙән...
Йәшенгә ишелде тауышы:
— Мин иҫән, мин иҫән!..
Ҡараһаң,
Ҡаялар уйлана,
Уяна быуаттар хәтере, —
Салауат тауышы яңғырай:
— Мин тере, мин тере!..



## Һағыш

Бер уйлайым донъя көтөргә,
Бер уйлайым Бохар китергә.
*(Халык йырынан)*

I

Нужа арбаларын тарта-тарта,
Игерҙәрен инде иктегеҙ.
Баштарығыҙ һуҡкан тарафтарға,
Алыҫ Бохарҙарға киттегеҙ.
Донъя көтөп була микән унда,
Сабырлыҡтың, тимен, ситендә.
Осор ҡанатығыҙ ҡайырылып,
Тыуған ерегеҙҙән айырылып,
Ҡалдығыҙмы инде сит илдә.
Алыҫтағы минең башҡорттарым,
Һағышығыҙ үткән үҙәккә.
Бер сит бауыр булып,
Улдарығыҙ
Әйләндеме икән үзбәккә.
Иҫкә төшмәйме ни Ашҡаҙарҙар,
Һалмаҡ Һаҡмар, серле Эстәрле.
Алыҫтарҙа ҡалған башҡорт моңо
Өҙмәй микән һеҙҙең эстәрҙе.
Әсе сейә һағындырмаймы ни,
Өлгөрһә лә алма көҙҙәрен.
Беләм, беләм,
Хатта күргәнем бар
Ҡутыр баҫа сит ай йөҙҙәрен.
Минең дә, тим, аянысым булды,
Йөрәкәйем янды ялҡында.
Башҡортостан,
Ситтә ҡаңғырҙым шул,
Бик алыҫта түгел, яҡында.
Шишмәләргә ятып һыу эскәндә
Сатнаны шул көйгән иренем.
Һыуһындарым минең һис
ҡанманы,
Сит яҡтарҙа байтаҡ йөрөнөм.
Тауҙарымда әле баҫып торам, —
Бик бейектә түгел, һөҙәктә.
Үҙендеке, тиҙәр, ситкә типмәҫ,
Үҙендеке, тиҙәр, үҙәктә...
... Тере генә ҡуҙҙай
бархандарға
Һағышығыҙ ҡала түгелеп.
Ерҙәренән йылы елдәр иҫһә,
Туңа төҫлө һинең күнелең.
Ҡарағаттар бешә Уралымда,
Ҡаралары — һинең күҙеңдәй.
Һағыштарҙан, ахыры,
тулышаһың,
Һытылырға торған йөҙөмдәй.
Үҙең менән йөрөй аҡ һаҡалың,
Һеҙҙеме ни һағыш өтмәгән.
Тағы ҡайҙа һуғылдығыҙ икән,
Бохар менән донъя бөтмәгән.
Башҡаларҙа инде — ил ҡайғыһы,
Сит ҡайғылар ҡала аҙаҡҡа.
Ят табында ят көйҙәрҙе буҙлап,
Әйләндегеҙ микән ҡаҙаҡҡа.
Әй ҡайтһағыҙ ине тыуған илгә,
Күңелдә юҡ осоҡ керебеҙ.
Тауҙарыбыҙ һеҙгә үрелеп ҡарай,
Ситтәр менән тулы еребеҙ.

II

Әллә ниңә тыныс түгел
Ваҡыт тигән был ара,
Күңелемдә дауыл икән,
Күңелдәрем болара.
Етеҙ елдәр болоттарҙың
Толомдарын үргәндәр.
Башҡа бәлә һуғылмаһын,
Баштан ашты күргәндәр.
— Ят ҡәүем, — тип,
Үҙегеҙгә
Һөҙә баҡмайҙар микән?..
Сит тарафта, башҡорттарым,
Һеҙҙе ҡаҡмайҙар микән?
Ваҡыттарҙың дарьяһында
Аҡтығыҙ ҙа аҡтығыҙ.
Тулған айҙай ҡалҡтығыҙ ҙа,
Ят яҡтарҙа баттығыҙ.
Сәс йолҡондо болоттарҙың
Көмөш тараҡтарынан.
Хатта миңә сәләм килмәй
Бохар тарафтарынан.
Күңелемдә дауыл минең,
Күңелдәрем болара.
Бүре һымаҡ баҡмай микән
Башҡорттарға Бохара.

III

Елдәр килеп,
Ап-аҡ ҡайындарҙың
Толомдарын биштән үрәләр.
Үҙ ерегеҙ...
Һеҙҙе ҡыра типте,
Ситкә ҡаҡты ҡәһәр түрәләр.
Гелән һикереп, аша үтте улар
Закон тигән генә ҡойманы.
Ҡайғылар, тим,
Эскә һыйһа һыйҙы,
Бер башығыҙ илгә һыйманы.
Бәйҙә торғандары бер ҡороп,
Ҡотолдомо икән ситтәрҙән.



Өҙгөләне, йолҡолаңы инде,
Ни күрмәне башҡорт ситтәрҙән.
Шалтыраған телмәр...
Буш вәғәҙә...
Һары майҙай,
Ҡалай иретте...
Үҙеңдеке әллә үҙһенмәне,
Ситтәр килеп, һине ситһетте.
Ярар әле тамаҡ ялғар өсөн
Һарына бар, ҡаҡы, балтырған.
... Булды инде
Һеҙҙең арағыҙҙа
Бәхет эҙләп,
Ерен ҡалдырған.
Булды инде,
Бөтәһе лә булды,
Ингәнемдә ғүмер көҙөнә.
Сит яҡтарҙа ҡалған башҡорттарым,
Һеҙҙең өсөн эсем өҙөлә...

* * *

Яҙҙың көнө асыҡ,
Күҙ теймәһен,
Тотмай икән һис тә тапмаһы.
Әллә бер ҙә ел үткәрмәй инде
Йоҡа ғына Йыһан япмаһы.
Ғәләм яҡты.
Яҙҙың көнө асыҡ,
Асы елгә асыҡ иҙеүе.
Ҡара ергә баҫтыҡ,
Әй, ҡыуаныс,
Күкһел туғайҙарҙы гиҙеүе.
Тыуған ерҙән үтәм яланаяҡ,
Ҡояш ялмай икән яланды.
Әй ҡыуаныс,
Яҡты донъяларҙа
Яҙ елдәре ҡаға яғамды.

* * *

Донъялары баҡҡан саҡта
Беҙгә гел һөҙөп кенә.
Әсәй ялғаны үҙәкте,
Ауыҙынан өҙөп кенә.
Әсәй үҙәгем ялғаны,
Өҙөлгәндә эскәйем,
Ҡыл да ҡыбырлатырлыҡ, тим,
Ҡалмағанда көскәйем.
Әсәй үҙәгем ялғаны,
Ялғанды бит үҙәгем.
Хатта үтерлекмен хәҙер
Тауҙарымдың һөҙәген.
Тоташтырҙым тоташырын,
Өҙҙөм инде өҙәһен.
Әсәйҙәрем ялғағанда
Ас донъяның үҙәген.
Башҡортостан,
Күрҙек инде,
Түҙҙек инде түҙәһен.
Туҡ булмаһаҡ та ялғайбыҙ,
Ас донъяның үҙәген.

* * *

Дилмөхәммәт бабай йәшәй ине,
Бында үҙебеҙҙең ҡәүем карты.
Гөл-сәскәгә гелән күмелә ине
Яҙҙарында уның әүен арты.
Ҡышын бында елдәр туҡтап ҡала,
Урырҙарын мәңге урмаҫ һымаҡ.
Ҡар өҫтөндә нурҙар ҡыҙа ине,
Оло табалағы ҡурмас һымаҡ.
Яҙҙарында,
Күкрәр яҙҙарында
Ҡалҡа ине бында күк үләндәр.
... Ауылымда минең күп үлгәндәр,
Аслыҡ йылдарында күмелгәндәр.
Уларҙың, тим, бында зыяраты...
Хәүефтәрҙең елмәй сыбар атым,
... Һә тигәнсе еңел атҡарғандар
Төҙөлөшкә тигән әҙерлекте.
Ташы кәрәк булған...
Аҡтарғандар
Туғандарым ятҡан ҡәберлекте.
Ҡырағайлыҡ,
Хәтәр ҡырағайлыҡ...
Ҡырағайлыҡ һеңгән ҡаныбыҙға.
Кәбәк баштар булып тыуғанбыҙмы,
Ҡырағайлыҡ бейей аңыбыҙҙа.
Янған ауылдарҙың көлө өҫтөндә
Олатайҙар төйәктәре ята.
Аҡтарылған анау ҡәберлектә
Туғандарҙың һөйәктәре ята.
Ҡырағайлыҡ,
Яман ҡырағайлыҡ
Күкрәктәрен кирә ер йөҙөндә.
Ҡәбер таштары бит ыңғыраша
Күптән ҡалҡҡан ферма нигеҙендә.